Башҡортостан Республикаһы

Ауырғазы районының муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы

Талбазы ауылы Лицейы

Бөтә донъя башҡорттарының 4-се ҡоролтайын ҡаршылап...

Ауырғазы районы башҡорттары ҡоролтайы ултырышында

«Мәктәптәрҙә туған телдәрҙе өйрәнеүгә ҡараш»

темаһына доклад.

Һаумыһығыҙ, хөрмәтле Президиум!

Хәйерле көн,Ҡоролтайҙа ҡатнашыусылар!

Халҡым теле миңә-хаҡлыҡ теле,

Унан башҡа минең илем юҡ;

Илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ,

Иле юҡтың ғына теле юҡ!

Р.Ғарипов

Уҡытыусылар иңенә халыҡ яҙмышы, ил, тел киләсәге, баланы шәхес итеп тәрбиәләү кеүек изге лә, яуаплы ла бурыс йөкмәтелгән. Ә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының бурысы иһә икеләтә яуаплы. Улар киләсәктә милләтебеҙҙең көсөн, йөҙөн күрһәткән, теленә битараф булмаған белемле шәхестәр тәрбиәләүҙә ҙур роль уйнай. Йәмғиәтебеҙҙең мөғәллимдәргә ҡарата битараф булмауы шатландыра. Хөкүмәтебеҙҙең, район хакимиәтенең уҡытыусыларҙың фиҙаҡәр хеҙмәтен күрә белеүе, баһалай килеүе беҙҙе ҡанатландырып ебәрә, яңынан-яңы үрҙәр яуларға этәргес һәм дәрт бирә. Ошо терәк һәм таяныс аҫтында илем, телем, республикам, тип янып эшләгәндә, беҙҙең киләсәгебеҙ ҙә өмөтлө, яҡты, ҡояшлы булыр.

Уҙған быуаттың алтмышынсы йылдарынан башлап илебеҙҙә бер телгә күсереү, совет халҡы тигән бер халыҡҡа уҡмаштырыу сәйәсәте алып барылыуы бер кемгә лә сер түгел. Бөтөн халыҡтар ҙа “үҙ теләктәре менән күсәсәк” телдең йәғни фәҡәт рус теленең генә өҫтөнлөгө төрлө юлдар, саралар менән даими рәүештә зиһенгә һеңдерелә торҙо. Билдәле, рус теле – илебеҙҙә генә түгел, донъя кимәлендә киң таралған абруйлы тел. Рәсәйҙәге бөтөн аҙ һанлы халыҡтар ҙа рус теле аша киң донъяға юл ала, донъя әҙәбиәте менән таныша, донъялағы фәнни ҡаҙаныштар менән файҙалана ала. Быны бер кем дә инҡар итмәй.  Әммә рус телен һәм башҡа сит телдәрҙе өйрәнеү ни өсөн туған тел иҫәбенә алып барылырға тейеш һәм ни өсөн туған телдә уҡытыу түгел, ә рус телендә уҡытыу өҫтөнөрәк, ә туған тел “артыҡ йөк”, “артыҡ мәшәҡәт” һанала? Был аянныслы хәл туған телдең тәбиғәттән һалынған ҡиммәтен, функцияһын, бурысын аңламауҙан (йәки аңлап та аңлатырға теләмәүҙән, дөрөҫөрәге аңлы рәүештә башты бутауҙан) килә, әлбиттә. Ни өсөн һәр милләт, милләттең алдынғы ҡарашлы зыялылары туған телдәренә мөкиббән китеп һаҡларға тырыша? Ни өсөн бер үк шарттарҙа төрлө ағастар үҫә, ни өсөн бер үк яланда күҙ яуын алып ултырған меңәр төҫтә сәскәләр шытып сыға, ни өсөн төрлө ҡоштар бар ителгән дә, улар төрлөсә

һайрай, ни өсөн һәр береһенең үҙ тәғәйенләнеше булған тиҫтәләрсә мең бөжәктәр һәм башҡа йән эйәләре йәшәй?Һәм, ниһайәт, рәүештәре, ағзалары менән бер үк булып, барыһы ла КЕШЕ тип аталған, әммә үҙ теле, үҙ моңо, үҙ йола-ғәҙәте, фәҡәт үҙенә генә хас традициялары менән йәшәгән кешеләр берлеге булған бихисап милләттәр бар ителгән был донъяға? Ни өсөн тәбиғәт һәр милләткә туған тел бүләк иткән? Ошондай бихисап һорауҙар яуапһыҙ ҡала, әммә бер һорауға яуап һәр ваҡыт әҙер: кеше тәбиғәт ҡанундарын боҙорға тейеш түгел.

Тел – кешелек донъяһы яратылғандан бирле иң ябай ауаздарҙан камиллаша, быуаттар һуҙымында шымара, нәҫелдән нәҫелгә күсә килгән иң ҡиммәтле хазина. Һәр милләт ошо хазинанан файҙалана, ошо телдә аралаша, уй-фекер йөрөтә. Туған телгә халыҡтың фәлсәфәһе, донъяны танып-белеүе, уй-тойғолары, хатта холоҡ-фиғеле һалынған. Туған телдә тойғолар сағылдырыла, ошо телдә моң ярала, башҡа йән эйәләренең ауаздарын да, ҡош һайрауҙарын да һәр милләт үҙ теленә яраҡлаштырып ишетә, тәбиғәт күренештәрендәге атамаларҙа ла үҙенең эске булмышын сағылдыра. Әсә ҡарынындағы сабый булмышына, күңеленә лә кисерештәр әсә теле аша уйыла бара. Туған тел ошо рәүешле ҡан (ген), күңел, эске булмыш аша быуаттар һуҙымында дауам итә. Халыҡ тигән бөйөк көстө бәйләп тотҡан ҡөҙрәт – уның теле. Милләтте милләт итеп тотусы төп сара – ул тел. Тел аша һеңгән моң, ғөрөф-ғәҙәт, йола. Туған теленән айырылған баланың үҙ мөхите булмай, күңел һыйыныр, йыуаныр туған халҡынан да мәхрүм була, ят мөхит тә үҙенеке итеп ҡабул итмәй.

“Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында” Законыбыҙ бар, милләтебеҙҙе таныҡкан абруйлы шәхестәребеҙ, заманса ҡарашлы йәштәребеҙ ҙә байтаҡ. Кәрәк саҡта уларға таянабыҙмы, уларҙың ярҙамын тоябыҙмы? Мәғариф системаһын оптималләштереү юлында нимәләр генә уйлап сығармайҙар! Элегерәк аҙнаһына 3-әр сәғәт башҡорт теле уҡыта торғайныҡ. Хәҙер Федераль дәүләт мәғариф стандарттарына һылтанып, башҡорт теле дәрестәре йылдан-йыл кәмей бара. Ә 5 йыл бөтөнләй уҡытылманы, сәбәбен һораһаң, йәнәһе федераль стандарттар буйынса уҡытылырға тейеш булмаған икән?! Быйылғы уҡыу йылында башланғыс кластарҙа дәүләт теле булараҡ башҡорт теле 1-әр сәғәт кенә уҡытыла, 1 сәғәт башҡа предметҡа бирелә. Һәм кластағы 24-25 бала менән 1 уҡытыусы шөғөлләнә. Ә 10-11-се кластарҙа бөтөнләй уҡытылмай. Ә инглиз телендә балалар ике төркөмгә бүленеп уҡый, әлбиттә, бындай бүленеү-бүленмәүҙең сифаты ниндәй икәнен аңлауы ауыр түгел. Ҡайһы бер ата-әсә,

башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу баланың өлгәш кимәленә насар йоғонто яһай, ваҡытты ала, тип һанай.

Уларҙың төп дәлилдәренең береһе – бөтә бала ла тел үҙләштереүгә һәләтле түгел, тип һанау. Әммә, алгебра, химия, хатта йыр, рәсем дәрестәре буйынса ла барыһы ла алдынғы түгел. Тик был йәһәттән береһе лә ҡаршылашмай ҙа, дәғүә лә белдермәй…

Яҡшы уҡыған бала – ул бөтә яҡлап та яуаплы бала. Әгәр ул ысынлап та тик яҡшы билдәләргә генә уҡый икән, башҡорт теленән дә шундай уҡ өлгәш буласаҡ. Башҡорт теле лә башҡа фәндәр кеүек яуаплылыҡ талап иткән фән. Математика һәм рус теле талаптарына күнгән балалар башҡорт теле буйынса белем талаптарына күнергә теләмәй. Эшләргә күндерә башлаһаң, класс етәкселәре лә, завуч-директорҙар ҙа яҡшы билдәләр ҡуйыуҙы талап итә башлай. Сөнки бөгөн ҡағыҙ, теүәл һандар заманы. Һандар күп итеп күрһәтелеп, ҡағыҙҙа матур яҙылһа – булды. Ә сифатта эш юҡ.

Үҙ телеңде белмәү, унан баш тартыу енәйәткә тиң, тип һанайым. Бала ғына түгел, ололар ҙа ни тиклем күберәк тел белә, шул тиклем үҫешкән, киңерәк ҡарашлы, тәрәнерәк фекерле була. Бер телде өйрәнеү икенсе телде өйрәнеүгә теләк тыуҙыра, этәреш бирә. Бары тик туған телде белеп кенә икенсе бер халыҡтың менталитетын аңлап, мәҙәниәтен хөрмәт итеп була. Ләкин Закон бар икән, уны хөрмәт итергә, уны ғәмәлгә ашырырға кәрәк. Һөйләү теле ҡанундарын аңлатҡан дәреслектәр, уҡытыуҙа билдәле бер аныҡ, камиллаштырылған система кәрәк.

Телде туған тел булараҡ өйрәнгән башҡорт балалары төркөмдәрендә лә хәл маҡтанырлыҡ түгел. Рус телле мәктәп һаналһа ла, Талбазы мәктәптәрендә күпселек татар, сыуаш, башҡорт балалары белем ала, ләкин туған телдәрҙе һайлағанда ата-әсәләрҙе уҡыусылар киләсәктә мотлаҡ тапшырасаҡ имтихандарҙы(ЕГЭ-БДИ) алғы планға ҡуйып, туған телде һайламауға этәрәләр. Һәм шулай итеп, дәреслекһеҙ, әҙерлекһеҙ туған рус теле уҡытыла башлай. Туған рус теле менән нагрузкаһы аҙ булған башланғыс синыф уҡытыусылары шөғөлләнә. Балалар һаны етәү булһа ғына, төркөмдәр асыла, ләкин быйыл 11-се класта 5 балаға рус төркөмө асылыуы һәм был төркөм башҡорт һәм сыуаш телдәре өйрәнеүсе балаларҙан ғына тороуы аңлашылмай ҙа, аптырата ла... Был балалар республика кимәлендәге олимпиадаларҙа ла ҡатнашып йөрөүселәр ине.  Ә бит федераль стандарттар төбәктәрҙең үҙенсәлеген, туған телдәрҙе өйрәнеү, этномәҙәни ерлектә тәрбиә алыу хоҡуғын инҡар итмәй. Һис шикһеҙ, беҙ яңы стандарттарҙа ҡуйылған талаптарҙы үтәп еткермәйбеҙ. Халыҡтың, тотош милләттең үҙ балаларын

туған телендә уҡытыуға булған конституцион хоҡуғы көсләп юҡҡа сығарыла тиһәң дә хата түгел. Аҙ комплектлы башланғыс мәктәптәр ябылды, хәҙер сират урта мәктәптәргә етте. Башҡорт мәктәбе урыҫ телле мәктәптең филиалы итеп ҡалдырылыуы ла телебеҙгә мәдхиә йырлап, бай тарихыбыҙ менән ғорурланып ҡына йәшәп булмауҙы күрһәтә.Рәсәй Президенты В.В.Путин талап иткәнсә, ауыл сходтары йыйыу, халыҡ фекерен тыңлау ҙа кәрәк. Заман юғары кимәл, етди бурыстар үтәүҙе талап итә. Ә “тыңлауһыҙ” етәкселәргә күрһәтмә документтар ебәрергә, уларҙан РФ Конституцияһында һәм Балалар хоҡуҡтары декларацияһында яҙылған “Һәр баланың туған телен өйрәнергә хоҡуғы бар” тигән пунктты мотлаҡ үтәүен талап итергә кәрәк.

Көнделек әрнеткән тағы ла бер проблеманы әйтмәй булмай: башҡорт теле кабинеттары иң аҙаҡҡы сиратта йыһазландырыла, барлыҡ ремонт эштәре уҡытыусылар аҡсаһына һәм улар көсө менән башҡарыла.

Беҙҙең район уҡыусылары һәләтле һәм башҡорт телен туған тел булараҡ та, дәүләт теле булараҡ та тырышып һәм ҡыҙыҡһынып өйрәнә - уңыштарыбыҙ шуны күрһәтә.Башҡорт телен уҡытыу буйынса районда ярайһы уҡ ҙур тәжрибә тупланған.

Мәктәптәрҙә һәм район күләмендә үткәрелгән саралар барыһы ла туған телде һаҡлап ҡалыуға йүнәлтелгән. Әгәр халҡыбыҙ бөгөн үҙен-үҙе һаҡламаһа, заман,дәүер шауҡымы уны тапап,юҡҡа сығарыуы мөмкин икәнлеген белә тороп,аңыбыҙҙы зәғифләп,илдәге хәлдәргә күҙ йомоп,үҙ аяғыбыҙ менән упҡын ситенә баҫырға хаҡыбыҙ юҡ.

Атайсалды ла юғалтһаҡ,

Моңобоҙҙо ла юғалтһаҡ,

Телебеҙҙе лә юғалтһаҡ,

Донъябыҙҙан ни ҡала?

-тип киҫәтә беҙҙе Башҡортостан халыҡ шағиры А.Игебаев та.

Кеше туған телен,мәҙәниәтен,әҙәбиәтен,халҡының традицияһын белмәһә, ул икенсе милләткә күсергә лә мөмкин.Быны тарих үҙе раҫлай.Шуға күрә шәжәрә байрамдарын үткәреү ҙә һаман актуаль булып ҡала килә.

Милли мәғарифты үҫтереү, милли рух тәрбиәләү, киләсәк быуында рух һәм әхлаҡ ныҡлығы булдырыу өсөн районда башҡорт теле уҡытыусылары бар көстәрен һалып эшләйҙәр. Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү, дәүләт теленең дәрәжәһен тағы ла юғарыраҡ күтәреү – беҙҙең изге бурысыбыҙ. Беҙ,

башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары, башҡорт теленең нәфислеген, йомшаҡлығын, гүзәллеген һәм уны нисек бар шул килеш киләһе быуынға еткерергә тейешбеҙ.

Хөрмәтле туғандар! Әйҙәгеҙ әле, башҡа милләттәрҙе хөрмәт итеп, үҙебеҙҙе яратып йәшәйек, үҙ-ара туған телебеҙҙә аралашайыҡ!

"Башҡортостан" гәзитенең бүлек мөдире, шағирә, Ш. Бабич исемендәге Республика премияһы лауреаты Лариса Абдуллинаның "Башҡорт теле" шиғыры беҙҙең өсөн набат булып яңғырай:

Һин - боронғо яугир, башҡорт теле,

Еңеп сыҡтың һәр бер алыштан!

Сынйыр сыңы, ҡылыс тауыштары

Ишетелә алыҫ-алыҫтан.

Салауат та һинең кеүек булған,

Һөргөнлө лә үткән ғүмере.

Ауылдарҙа һине һаҡлағандар,

Көлгә күмгән кеүек күмерҙе.

Йыраусылар һиңә ҡалҡан булған.

Ҡырҡҡанда ла телен сәсәндең,

Һуңғы һүҙен әйтеп киткән улар,

Түбән төшөрмәгән бәҫеңде.

Һин - дәүләттең именлеге, телем!

Һалдат кеүек һаҡта бөгөн дә!

Халҡың киләсәген йөкмәп алдың,

Һин күтәрҙең намыҫ йөгөн дә!

Башҡорт теле!

Һин сабыйым кеүек ғәзиз!

Ҡараштарың беҙгә төбәлгән.

Әйтсе, ҡайһы әкиәттә сафлыҡ

Яһилдарҙың барын еңәлгән?

Әйтсе, телем!

Һин бит тере ауаз!

Бармы һине һаҡлар заттарың?

Хыянатҡа, беләм, язаң ҡаты...

Тоғроларҙың ҙурла анттарын!"

ИҒТИБАРЫҒЫҘ ӨСӨН РӘХМӘТ!